*Фәнүзә НӘҘЕРШИНА,*
*филология фәндәре докторы, профессор*

# Исеменә күрә — есеме



«Ижтимағи-сәйәси, фәнни-популяр һәм нәфис айлыҡ журнал» тигән билдәләмәһе менән донъяға сығарыла башлаған «Ватандаш» журналы бына инде егерме йыл буйына үҙенең төп йүнәлешенән тайпылмай, баҫылған материалдарында ғилми объективлыҡ, эстетик зауыҡ принциптары һаҡлана. Ул уҡыусыларының рухи байлығын арттырыуға һәм донъяуи ҡараштарын камиллаштырыуға ғәйәт ҙур өлөш индергән абруйлы баҫма булып ҡала. «Ватандаш»та конъюнктураға, «ҡыҙҙырылған факттарға» урын юҡ. Әгәр ҙә илебеҙҙе, ватандаштарыбыҙҙы халыҡ-ара кимәлдә танытыу маҡсатында барлыҡҡа килтерелгән матбуғат баҫмаһында быға юл ҡуйылһа, журналдың тотороҡлоғон һаҡлауға ҙур өлөш индереүсе авторҙар даирәһе күптән тарайыр ине. Шөкөр, журнал үҙ исеменең есеменә тап төшөрмәй, эҙмә-эҙлекле рәүештә ил, халыҡтар тарихындағы, мәҙәниәттәр үҫешендәге мөһим ваҡиғаларҙы яҡтыртыуын дауам итә. Күп һанлы рубрикалар эсендә инглиз телендә донъя күргән материалдарҙың һуңғы ваҡытта күренмәй башлауы ғына бер аҙ күңелде ҡыра, сөнки миңә, фольклор әҫәрҙәрен башҡорт, рус һәм инглиз телдәрендә баҫтырып сығарыу менән байтаҡ йылдар шөғөлләнгән кешегә, журналдың өс телдә нәшер ителеүе айырыуса ҡулайлы ине.

Халҡыбыҙҙың мәшһүр эпик ҡомартҡыһы «Урал батыр»ҙың профессор Сәғит Шафиҡов тәржемәһендә тәү башлап инглиз телендә баҫылып сығыуы менән дә беҙ «Ватандаш»ҡа бурыслыбыҙ. Аҫыл ҡомартҡыбыҙҙы донъя мәҙәниәте тарихына индереү юлындағы тәүге аҙымдарҙың береһе ине был. Тәржемәнең үҙебеҙҙең мөхиттә, үҙ еребеҙҙә йылы ҡабул ителеүе бигерәк тә ҡыуандырҙы ул саҡта. Баҫылыуы булды, күп тә үтмәй, эпосты яттан һөйләүселәр конкурстарында инглиз телендәге өҙөктәр яңғырай ҙа башланы. Аҙаҡ, 2003 йылда, эпос өс телдә, сувенир баҫма булараҡ, «Информреклама» нәшриәтендә донъя күрҙе. Ҡитап итеп сығарғанға тиклем беҙҙең проект буйынса инглиз телендә әҙерләнгән «Аҡбуҙат», «Заятүләк

менән Һыуһылыу», «Урал батыр» (сәсмә версияһы) ҡобайыр-иртәктәрен, риүәйәт һәм легендаларҙы, мәҡәл-әйтемдәрҙе, улар хаҡындағы мәҡәләләрҙе баҫырға теләк һәм ихтирам менән ихлас ҡабул иткән редакция етәкселегенә, уның хеҙмәткәрҙәренә сикһеҙ рәхмәтлебеҙ. Журналды өс телдә нәшер итеү мөмкинлеге тарайған бөгөнгө шарттарҙа, йөкмәткеләренең әһәмиәтенә, актуаллегенә ҡарап, ҡайһы бер текстарҙы инглиз телендәге һығымталар менән биреү маҡсатҡа ярашлы булыр ине. Ул бурыс, әлбиттә, авторҙарҙың үҙҙәренә йөкмәтелергә тейеш.

«Ватандаш»та, һирәкләп булһа ла, сит ил ғалимдарының Башҡортостанға, башҡорттарға ҡағылышлы яҙмаларының баҫылыуы ла журналға үҙенсәлекле бер биҙәк өҫтәй. Шуны ла иҫкәртәйем: фән донъяһына ҡараған тәржемә материалдарына төп иғтибарымды йүнәлтеү минең ғилми эш менән ғүмер итеүемә бәйле. Бығәйбә! Рухи мәҙәниәттең бүтән тармаҡтарына ҡараған тәржемәләрҙең баҫылыуы журналды уҡыусылар даирәһен киңәйтеүендә шигем юҡ. Башҡа телдәрҙән башҡортсаға йәки руссаға, руссанан башҡортсаға тәржемәләнгән материалдарҙы баҫтырыу мөмкинлеге сикләнмәгәндер, тип уйлайым. Үҙем ошо көндәрҙә генә ҡаҙаҡ әҙәбиәтенең арҙаҡлы вәкиле Муҡағәле Маҡатаевтың (1931—1976) күренекле әҙибебеҙ Мәүлит Ямалетдин тәржемәһендә бирелгән бер шәлкем шиғырҙарын («Ватандаш», 2015. №12) тәрән тулҡынланыу менән уҡып сыҡтым. Мәшһүр шағирҙың:

Мин таулымын!
Йәнем тауҙан яратылған.
Әсәм тыуған тау тигән изге ҡәлғәм,
...Тауға менеп,
Күккә осоп китһәм икән,
Тотоп алып бөркөттөң ҡанатынан.

Уҡып сығыу менән телгә инергә, мейегә һеңергә торған юлдар бит был!

Ғилми даирәләрҙә, хаҡлы рәүештә, «Ватандаш» — энциклопедик йөкмәткеле журнал тигән баһалама йыш ишетелә, матбуғат биттәрендә лә был фекер даими сағыла килә. Журналдың ошо йүнәлештә юл алып, мөһим рухиәт сығанағына әйләнеүендә баҫманың тәүге мөхәррире академик Ғайса Хөсәйеновтың хеҙмәтен баһалап бөтөү мөмкин дә түгелдер, бәлки. Әммә етәксе, ниндәй генә талантлы булмаһын, эргәһендә тәрән белемле ижади шәхестәр, намыҫлы, тырыш хеҙмәткәрҙәр тупланмаһа, шундай киң профилле, күләмле журнал бөгөнгө юғары кимәлгә күтәрелә алмаҫ ине. Артабан, Ғайса Хөсәйенов редакциянан киткәс, юғары кимәлде һаҡлау бурысы уның вариҫтарына, рухташтарына күсте. Ғайса Батыргәрәй улына алмашҡа килгән баш мөхәррирҙәр Фәрит Вафа улы Әхмәҙиев, һуңыраҡ Азамат Рәмил улы Юлдашбаев — улар икеһе лә әҙәби мөхиттә киң билдәле, креатив фекерле ижади шәхестәр — «Ватандаш»тың бәҫен һаҡлауға көстәрен йәлләмәне һәм йәлләмәй.

Хөрмәтле ҡәләмдәштәр! Журналдың 20 йыллыҡ юбилейы менән Һеҙҙе ихлас күңелдән ҡотлайым!